**Аңлатма яҙыу**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-9-се класс уҡыусылары өсөн эш программаһы.**

**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаһы**

**Эш программаһы:** Башҡорт әҙәбиәте М.Б,Юлмөхәмәтов, М.Х.Иҙелбаев, Ә.М.Сөләймәнов, З.И.Яйҡарова, БР мәғариф министрлығы тарафынан 2012 йылда раҫланған, Зәйнәп Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте

Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа «1-сеСтәрлебаш урта дөйөм белем биреү мәктәбе» муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының «Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:

«Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы.

Программаның йөкмәткеһе 3 йүнәлештә төҙөлгән

- телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу;
- тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).
-лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уқыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

Башҡорт теле – башҡорт халҡының туған теле һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып һанала. Туған телдең метапредмет белем биреү функцияһы мәктәптә белем алыу процесында бала шәхесен формалаштырыуҙа "Башҡорт теле " предметының универсаль, дөйөмләштереү характерын билдәләй. Башҡорт теле баланың фекер үҫешенә булышлыҡ итә; белем һәм күнекмәләрҙе үҙ аллы үҙләштереү һәләттәрен үҫтерә, шулай уҡ уқыусыларҙың үҫтереүсе уқыу эшмәкәрлеген ойоштора. Туған тел башҡорт мәҙәниәтен өйрәнеүгә нигеҙ булып тора һәм башҡорт әҙәбиәтенең рухи тел байлығын үҫтереүгә булышлыҡ итә; уқыусыларҙы кешелектең мәҙәни тарихи тәжрибәһенә ылыҡтыра. Киләсәктә төрлө белемде үҙләштереү һәм һаҡлау формаһы булараҡ, башҡорт теле бөтә предметтар менән тығыҙ бәйләнештә тора һәм профессиональ күнекмәләрҙе үҙләштереү сифатына йоғонто яһай. Аралаша белеү, шул һөҙөмтәлә уңыштарға өлгәшеү, юғары профессиональ һәм социаль әүҙемлек шәхес тормошоноң төрлө өлкәләрендә өлгәшелгән уңыштарын билдәләүсе характеристикаһы булып тора. Туған тел баланың төрлө тормош ситуацияларында тәрбиә-этик нормаларын формалаштырыу нигеҙе; үҙ ҡылыҡтарына дәлилле баһа биреү мөмкинлеген үҫтерә.

Уҡыу процесын ойоштороу формалары:

- Дәрес-консультация
- Практик дәрестәр

- Эшлекле уйындар
- Ярыш дәрестәре
- Компьютер дәрестәре
- Төркөмдәр менән эшләү
- Ижади дәрестәр
- Дәрес конкурстар
- Әңгәмә дәрестәре
- Дәрес уйындар
- Дәрес конференциялар
- Дәрес семинарҙар
- Интеграцияланған дәрестәр
- Предмет – ара дәрестәр
- Дәрес экскурсиялар

Башҡорт теле предметы башҡа дәрестәр менән тығыҙ бәйләнгән:

- Донъя әҙәбиәте һәм мәҙәниәте, бында башҡорт теле укыусыларҙы донъя халҡтарының рухи байлығына ылыҡтырыусы сара булып тора. Илһөйәр һәм башҡа халыҡтарға ҡарата толерант ҡарашлы шәхес итеп формалаштыра.
- Рәсәй тарихы, йәмғиәтте өйрәнеү, география, бында башҡорт теле укыусыларҙы йәмғиәттең мәҙәни-тарихи тәжрибәһен аңлатыусы канал ролен башҡара.
- Химия, физика, математика, ИКТ, информатика, бында башҡорт теле төрлө кимәлдәге белемдәрҙе һаҡлау формаһы булып тора, белемдәрҙе үҙләштереү сифатына йоғонто яһай. Артабан юғары профессиональ кимәлде үҫтерә.
- Хоҡуҡ, бында башҡорт теле тормошта баланың үҙ тотошоноң этик нормаларын формалаштырыу нигеҙе булып тора. Уға төрлө осраҡтарҙы мораль яҡтан дөрөҫ баһаларға ярҙам итә.

Башҡорт әҙәбиәтен өйрәтеүҙең маҡсаттары һәм бурыстары:
**Уҡыусылар түбәндәгеләрҙе белергә тейеш:**
- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең авторын, исемен, мәғәнәһен;
- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең төп темаһын, композицион үҙенсәлектәрен;
- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең ваҡиғаһын (сюжетын) һәм геройҙарын (ге-ройҙар һәм ваҡиғаларҙың үҙ-ара бәйләнешен);
-әҫәрҙең художестволы образы, темаһы, идеяһы, сюжеты, композицияһы, рифма хаҡындағы төшөнсәләрҙең билдәләре;
- драматик һәм лиро-эпик әҫәрҙәрҙең характерлы үҙенсәлектәре;
- программа тарафынан ятлау өсөн тәкдим ителгән әҫәрҙәрҙең текстары.

**Уҡыусылар түбәндәге күнекмәләргә эйә булырға тейеш**:
Туған әҙәбиәттән, телдән һәм яҙма рәүештә үткәрелә торған эш төрҙәре
Художестволы, фәнни-популяр һәм публицистик текстарҙы ҡысҡырып етеҙ уҡыу.
Художестволы әҫәрҙәрҙе (шул иҫәптән драма әҫәрҙәрен) тасуири уҡыу.
Ҙур булмаған эпик әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен яҙма йәки телдән һөйләп биреү.
Һүҙ менән телдән һүрәт эшләү. Художестволы әҫәрҙәрҙе инсценировкалау.
Өйрәнелә торған әҫәр буйынса телдән һәм яҙма рәүештә фекер йөрөтөү характерындағы инша яҙыу: һорауҙарға тулы яуап биреү; геройҙарҙы индивидуаль, сағыштырма, төркөмләп ҡылыҡһырлау. Яҙма йәки телдән сығыш яһау өсөн план төҙөй белеү. Үҙ аллы уҡылған әҙәби әҫәр, ҡаралған кинофильм һәм телевизион тапшырыу хаҡында (әҫәрҙең геройҙары һәм ваҡиғаларына үҙ мөнәсәбәтеңде билдәләү) баһалама бирә белеү.Предмет-ара бәйләнештәр. Башҡорт теле.Урынды һүрәтләү элементтарын эсенә алған хикәйәләү характерындағы текстарҙың йөкмәткеһен ҡыҫҡартып йәки һайлап изложение төҙөү. Урынды, тарихи һәм мәҙәниәт ҡомартҡыларын һүрәтләп инша яҙыу. Мораль-этик һәм патриотик темаларға фекерләү характерындағы инша яҙыу. Ишетелгәндәр нигеҙендә инша-хикәйә төҙөү.
1-се төр күнекмәләр
-яҙыусы һүрәтләгән художестволы картиналарҙы уй менән күҙ алдына баҫтырыу;
- художестволы әҫәрҙәрҙе, фәнни һәм публицистика әҫәрҙәрен айыра белеү;
-өйрәнелә торған әҫәрҙәрҙең сюжет элементтарының, композицияның (автор ҡылыҡһырламаһы, геройҙарҙың эше, ҡылыҡтары һәм портретының, пейзаж һәм интерьерҙың) идея-художество урынын билдәләү;
- контекст эсендә һүрәтләү сараларының идея-художество урынын билдәләү;
- уҡытыусы ҡуйған проблемалы һорау ярҙамында геройға ҡылыҡһырлама биреү;
- авторҙың мөнәсәбәтен билдәләү маҡсатында геройҙарҙы үҙ-ара сағыштырыу;
-эпик, лирик, лиро-эпик һәм драматик әҫәрҙәрҙе айыра белеү.
2-се төр күнекмәләр
- художестволы, фәнни-популяр һәм публицистик текстарҙы дөрөҫ, етеҙ итеп ҡысҡырып уҡыу;
-художестволы әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу;
- эпик әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен яҙма рәүештә (телдән) тулы итеп йәки һайлап, ҡыҫҡартып һөйләп биреү (изложение төҙөү);
- өйрәнелгән әҫәр буйынса телдән йәки яҙма рәүештә фекерләү характерындағы инша яҙыу;
-һорауҙарға тулы яуап һәм геройҙарға (индивидуаль һәм сағыштырма) баһалама биреү;
- эпик әҫәргә йәки уның өҙөгөнә план төҙөү;
-телдән йәки яҙма сығыш яһау өсөн план төҙөү;
-үҙ аллы уҡылған әҙәби сәнғәт әҫәрҙәренә (әҫәрҙәге герой һәм ваҡиғаларға ҡарата үҙ мөнәсәбәтеңде белдереп) яҙма йәки телдән баһалама бирә белеү.

**“Башҡорт (туған) теле” предметының уҡыу планындағы сәғәттәр бирелеше.**

1-се Стәрлебаш урта дөйөм белем биреү мәктәбенең уҡыу планы буйынса 5-се класта башҡорт (туған) әҙәбиәте өйрәнеүгә бөтәһе - 68 сәғәт бирелә ( аҙнаһына - 2 с.); 6-сы класта бөтәһе -68 сәғәт бирелә ( аҙнаһына - 2 с.); 7-се класта бөтәһе -68 сәғәт бирелә ( аҙнаһына - 2 с.); 8-се класта бөтәһе - 68 сәғәт бирелә ( аҙнаһына - 2 с.); 9-сы класта бөтәһе -66 сәғәт бирелә ( аҙнаһына - 2 с.);

**Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре.**

“Башҡорт теле” предметының өйрәнеү һөҙөмтәләре.

Төп мәктәп сығарылыш уҡыусыларының башҡорт теленән программаһы үҙләштереүҙең **шәхси** һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:

1) башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләттәрен һәм шәхестең мораль-этик сифаттарын үҫтереүҙә башҡорт теленең роле, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

2) башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; башҡорт теленә ҡарата ихтирам, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; телмәр үҙ камиллаштырыуға ынтылыу;

3) аралашыу прцесында кәрәкле һүҙлек запасын эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтең һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Туған әҙәбиәт программаһын үҙләштереүҙең **метапредмет** һөҙөмтәләре булып:

1) телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:

Аудирование һәм уҡыу:

• Телдән һәм яҙма хәбәр иткән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;

• төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү), төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;

• төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү; төрлө төрҙәге аудирование менән эш итеү (һайлап алыу, танышыу);

• төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлеге (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт-дискылар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәләрен булдырыу;

• һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;

• стилистик үҙенселектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

һөйләү һәм яҙыу:

• алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеген, хәрәкәттең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;

• тыңлаған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;

• төрлө стилдә һәм жанрҙа, адресланыуға ҡарап һәм аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;

• телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;
• төрлө төрҙәге монологты (хәбәрләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалог (этикеты һүҙ эсенә алған, диалог-һорашыу, диалог-аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ.б; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүен) үҙләштереү;
• ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;
телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, телмәр аралашыу процесында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;
уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматик һәм телмәр хаталарын таба һәм уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;
алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; башҡорт теленән башҡа фәндәрҙә белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу;
аралашыу процесында тир-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуациялаҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

**Предмет** һөҙөмтәләре:
1) телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел менән халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;
2) гуманитар фәндәр системаһында башҡорт теленең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау;
3) башҡорт теле тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;
4) тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистика һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәби тел;
5) башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;
6) телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәметәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;
7) һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;
8) тел-һүрәтләү саралары һәм уларҙы үҙ телмәрендә ҡулланыу;
9) башҡорт теленең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе
## 5-се кл.

Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Уҡыусыларҙың йәйге тәьҫораттары менән уртаҡлашыу, уҡыу, белем, яңы уҡыу йылы тураһында әңгәмә ойоштороу.

Б. Бикбай. Туған тел. Р. Ғарипов. Туған тел.Шиғырҙарҙа туған телде данлау, хөрмәтләү мотивтарының сағылышы. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Туған телдең ҡәҙере, уны
белеүҙең мөһимлеге тураһында әңгәмә.
Әминбәк (башҡорт халыҡ әкиәте).
Әкиәттең йөкмәткеһен үҙләштереү, әкиәт стилендә һөйләү күнекмәләре үткәреү. Һүҙлек өҫтөндә эш.К. Кинйәбулатова. Көҙ еткәс. Ф. Рәхимғолова. Көҙгө Урал. Р. Ғарипов. Торналар. Н. Иҙелбай. Дүрт миҙгел.
Б. Ноғоманов. Йәйбикә менән Көҙбикә.
Әҫәрҙәрҙә көҙгө тәбиғәттең тасуирланыуын ҡарау, уны үҙең күргәндәр менән сағыштырыу. Шиғырҙарҙы тасуири
уҡыу, һүрәттәр төшөрөү. Яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Сағыштырыу тураһында төшөнсә биреү.
М. Кәрим. Сыйырсыҡ балаһы. А. Йәғәфәрова. Яҡшылыҡ.
Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Үҙ һүҙҙәрең менән һөйләү күнекмәләре үткәреү. Хикәйә менән әкиәтте сағыштырыу.
Н. Әминева. Тыуган ер. Д. Бураҡаев. Урал тауҙары. Тыуған ер (ҡобайыр). Т. Ғәниева. Уралиә тигән ил (әкиәт).
Р. Ниғмәти. Йәмле Ағиҙел буйҙары (поэманан өҙөк). Ф. Рәхимғолова. Мин – Башҡортостандан. Ә. Вахитов. Аҡһаҡал аманаты.
«Минең тыуған төйәгем» темаһына әңгәмә. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Тыуған ер, тыуған төйәк, Башҡортостан, Урал тураһындағы
башҡа әҫәрҙәрҙе иҫкә төшөрөү.
А. Йәғәфәрова. Дуҫлыҡ менән шаярмайҙар (әкиәт). Ф. Мөхәмәтйәнов. Ҡыҙыҡ һүҙ. Ф. Иҫәнғолов. Хәмит күпере. Йылмайыу. Р. Ғарипов. Алма.
Шиғырҙар өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Әкиәттәрҙең һәм хикәйәнең йөкмәткеһен үҙләштереү, уларҙа дуҫлыҡ, хеҙмәт темаһының сағылышын ҡарау. Образдарға характеристика биреү. Яңы һүҙҙәр үҙләштереү.
С. Әлибаев. Ҡыш. Н. Мусин. Ҡоралайҙар. В. Әхмәҙиев. Ҡышҡы урманда. Ҡ. Даян. Шыршы. М. Кәрим. Ҡыш бабай бәләкәй саҡта.
Шиғырҙарҙа ҡышҡы тәбиғәттең матурлығының, шыршы байрамының тасуирланыуы. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү.
Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү. Образдарға характеристика биреү. Яңы һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе үҙләштереү. Шиғри телмәр һәм проза телмәре. Хикәйәләү тураһында төшөнсә.
Башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады. «Аҡъял батыр», «Ҡамыр батыр» әкиәттәре. Мәҡәлдәр. Йомаҡтар. Таҡмаҡтар. Йырҙар.
Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады тураһында дөйөм белешмә биреү, уның традицион жанрҙарын барлау, һәр жанрға хас үҙенсәлектәрҙе асыҡлау. Әкиәттәрҙең тематик төркөмдәрен ҡарау. Әкиәттәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, әкиәт стилендә һөйләү күнекмәләре үткәреү. Әкиәт геройҙарына характеристика биреү. Мәҡәлдәрҙең, йомаҡтарҙың, таҡмаҡтарҙың, йырҙарҙың жанр үҙенсәлектәренә төшөнөү.
Р. Солтангәрәев. Эшләп ашаһаң. З. Биишева. Йәшәү – хеҙмәт. Ф. туғыҙбаева. Яңы күлдәк. «Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән» әкиәте.
Әҫәрҙәрҙә хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләү, һөнәр һайлау. «Минең буласаҡ һөнәрем» темаһына әңгәмә. Төрлө һөнәрҙәр тураһында мәҡәлдәр йыйыу, йырҙар тыңлау.
Д. Бүләков. Яралы китап. Ғ. Рамазанов. Ағайым хаты. Ә. Вахитов. Өс бөртөк бойҙай. М. кәрим. Дан кәпәс түгел.

Н. Мусин. Атайымдың ос һәнәге.Хикәйәләрҙә һуғыш темаһының бирелеше. Фронтта һәм тылда ил азатлығы өсөн көрәш. Образдарға характеристика. Әҫәрҙәрҙең
йөкмәткеһен тасуири һөйләргә өйрәнеү. Һүҙлек өҫтөндә эш. Тәржемә күнекмәләре үткәреү. Хикәйә тураһында төшөнсә.
Ә. Әминев. Әсикмәк. Ф. Мөхәмәтйәнов. Әсәйем ҡулы. Әсә йөрәге (ҡобайыр). Ғ. Аллаяров. Таҫтамал.
К. Кинйәбулатова. Әсә күңеле.Әҫәрҙәрҙә әсә образының бирелешен асыҡлау. Шиғырҙарҙы тасуири итеп уҡыу күнекмәләре үткәреү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен
үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү.
Р. Назаров. Яҙ килә. З. Хисмәтуллин. Сыйырсыҡ. С. Әлибаев. Яҙҙы кем килтергән? М. Кәрим. Һеңлемдең төшө.
Ҡ. Даян. Торналар. Р. Ғарипов. Һабантурғай йыры.
Әҫәрҙәр өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Шиғырҙарҙа миҙгелдәр алмашыныуы, тәбиғәттең уяныуы, яҙ килеүе,
ҡоштарҙың, хайуандарҙың тормошондағы үҙгәрештәрҙе күҙәтеү. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләү, тәржемә күнекмәләре
үткәреү. Яҙ тураһында әңгәмә үткәреү, ижади эштәр башҡарыу. Йәнләндереү тураһында төшөнсә.
«Айыу менән бал ҡорттары» башҡорт халыҡ әкиәте. Б. Ноғоманов. Ҡарһылыу менән Яҙһылыу. Ғ. Хисамов. Аҡъяурын сал
бөркөт.
Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләү, һүҙлек, тәржемә эшен башҡарыу. Әкиәт геройҙарының эштәрен барлау. Ауыҙ-тел
ижады һәм әҙәбиәт.
М. Кәрим. «Өс таған» повесынан өҙөктәр.
Өҙөктәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, ҡысҡырып, дөрөҫ интонация менән уҡыу күнекмәләре үткәреү. Әҫәрҙә ысын дуҫлыҡтың
сағылышын ҡарау, дуҫлыҡ тураһында әңгәмә ойоштороу. Ғабдулла, Вәзир, Айҙар образдарына характеристика биреү.
А. Игебаев. Еңеү көнө. К. Мәргән. Ҡурайсының үлеме. Р. Ниғмәти. Еңеүселәргә дан. В. Исхаҡов. Миҙал һәм малай.
Еңеү көнөнә арналған шиғырҙарҙы тасуири уҡыу. Шағирҙарҙың был иҫтәлекле тарихи ваҡиғаға, еңеүселәргә мөнәсәбәтен,
ватансылыҡ тойғоларының сағылышын күҙәтеү, Еңеү көнө, Бөйөк ватан һуғышы, халҡыбыҙҙың ил азатлығы өсөн һуғышта күрһәткән
батырлығы тураһында әңгәмәләр ойоштороу, ижади эштәр башҡарыу. Яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү, тәржемә эштәре башҡарыу. Еңеү
тураһында йырҙар өйрәнеү.
Р. Назаров. Тракторсы йыры. З. Хисмәтуллин. Урман ҡунағы. С. Агиш. Турыҡай. М. Ғафури. Һарыҡты кем ашаған?
Шиғырҙы тасуири итеп уҡыу күнекмәләре үткәреү. Үҙ һөнәреңә, хеҙмәткә һөйөү, ил, халыҡ, киләсәк алдында бурыс төшөнсәләре
тураһында фекер алышыу. Сәсмә әҫәрҙәрҙе тасуири итеп уҡыу үҙенсәлектәренә төшөнөү. Мәҫәлдәрҙең мәғәнәһенә төшөнөү,
йөкмәткеһен үҙ һүҙҙәреү менән һөйләп өйрәнеү. Әҫәрҙе ролдәргә бүлеп уҡыу, образдарға характеристика биреү.
Аллегория һәм мәҫәл тураһында төшөнсә.
С. Муллабаев. Йомарт йәй. Б. Рафиҡов. Йондоҙ һанаусы малай. М. Кәрим. Ап-аҡ мөғжизә.Шиғырҙа йәйге тәбиғәттең тасуирланыуы.
Үҫемлектәрҙең, бөжәктәрҙең тормошон күҙәтеү. Йәй, йәйге каникул, йәйге эштәр
тураһында әңгәмәләшеү, ижади эштәр башҡарыу. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Хикәйәләрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, образдарға
характеристика биреү, яҙма эштәр эшләү. Йәйге тәбиғәткә экскурсия ойоштороу.

Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар
1. Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙең уҡыған тексты аңлай алыу;
2. Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған фильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;
3. Предметты, күренеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү;
4. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;
5. 8 – 10 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;
6. Тексты шыма, аңлы, дөрөҫ, тотош һүҙләп уҡыу, логик баҫымдарҙы, паузаларҙы дөрөҫ әйтеү; тасуири уҡыу

**6-сы кл.**

З.Биишева " Башҡорт теле"Уҡыусылар менән Дәүләт символикалары тураһында һөйләшеү; Башҡортостан Республикаһы флагы тура¬һында тексты уҡыу, өҫтәлмә мәғлүмәттәр биреү; һүҙлек менән эшләү күнекмәләрен үҫтереү
Р.Мифтахов "Һүҙ, "Башла" Уҡыусылар менән яҡшы сифаттар, тырышлыҡ тураһында һөйләшеү, шиғырының йөкмәткеһен үҙләштереү; яҙыу күнекмәһен үҫтереү.
Ғ.Хөсәйенов"Мөҡәдәс" Парса тураһында төшөнсә
Ш.Биҡҡолов "Яңырыу" Шағирҙың биографияһы менән танышыу, шиғырҙар менән танышыу, тасуири уҡыу күнекмәләрен иҫкә төшөрөү.
Р.Бикбаев."Уралыма", "Салаут ҡылысы" Шағирҙың биографияһы менән танышыу, шиғырҙар менән танышыу, тасуири уҡыу күнекмәләрен иҫкә төшөрөү.
Ә.Атнабаев"Салауат менән һәйләшеү" Башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевтың тормош юлын һәм ижадын өйрәнеүҙе дауам итеү, ри-үәйәт тураһында төшөнсә биреү; «Тыуған илем» шиғырының йөкмәткеһен үҙләштереү
С.Шәрипов "Яҙмыш менән алыш"Палдискиҙағы Салауат Юлаев музейы тураһында уҡыу, уҡыусыларҙың һүҙ-лек запасын арттыры
М.Ғәли " Ҡайт Салауат" Әҫәрҙең идея тематик йөкмәткеһе.
Боронғо әҙәбиәт тураһында мәғлүмәт
Ә.Лотфуллин "Алтын көҙ "картинаһы Картинаны һүрәтләү ,картина аша кеше тормошоноң ҡайһы миҙгеле тәбиғәттең көҙ миҙгелен хәтерләтеүен асыҡлау.
"Урал батыр" әкиәте Әкиәт тураһында төшөнсә, тасуири уҡыу."Аҡъял" батыр әкиәте.
Легенда тураһында Оҡшаған легенданы уҡып йөкмәткеһен үҙләштереү.
Бәйеттәр тураһында Бәйет тураһында төшөнсә
Алтмыш ике партизан тураһында бәйет Бәйеттең йөкмәткеһен үҙләштереү. Тасуири уҡыу күнекмәләрен нығытыу.
Мәскәүҙән киттек берлинға еттек Бәйөттәр темыһы менән танышыуҙы дауам итеү.
Исемһеҙ таҡмаҡтар. , таҡмаҡ (белешмә), уҡыусыларҙың логик фекерләү һәләтен үҫтереү

Көләмәстәр тураһында төшөнсә.	Боронғо әҙәбиәт тураһында мәғлүмәт,боронғо әҙәбиәт үҙ эсенә индергән яҙыусылар менән таныштырыу.
Ҡол әли “Йософтоң матурлығы”	Әҫәрҙе тасуири уҡыу, образдар менән танышыу.
Ҡара табын ырыуы шәжәрәһе	Шәжәрә тураһында мәғлүмәт биреү, юрматы ырыуы шәжәрәһе менән таныштырыу,ниндәй маҡсат менән төҙөлөүен асыҡлау.
Шәжәрә төҙөү	Ижади эш аша бронғо әҙәбиәттең тарихын һөйләү.
Ш.Бабич”Башҡортостан”	Ш.Бабич”Башҡортостан”шиғырын тасуири уҡырға, йөкмәткеһен үҙләштереү.
Ф.Туғыҙбаева”Эй яҙмышым минең”	.
Я.хамматов белешшмә ,“Ғайзулла”, образдар менән танышыу.
М.Мортазин ижады менән таныштырыу.
Р.Солтангәрәйев ”Осто бөркөт”
Т. Йосопов “Күңел тула”
Шиғри телмәр тураһында	Яҙма эштәргә анализ яһау, ҡағиҙәләрҙе иҫкә төшөрөү; Салауат Юлаев һәйкәле тураһында һөйләшеү
Кластан тыш уҡыу.С.Агиш “Ҡунаҡ һәм намыҫ”
Ш.Бабич”Башҡортостан”шиғырын тасуири уҡырға, йөкмәткеһен үҙләштереү.
Ялыҡ Бурнаҡ улы ( “Һуңғы һартай” әҫәренән өҙөк)
З.Биишева,Н.Нәжми	“Башҡортостан”	Шиғырҙың килеп сығышы тураһында дөйөм төшөнсә.
Ҡурай. Башҡорт халыҡ йыры.	Тарихи әҫәрҙе уҡыу,анализлау
Нур Ғәлимов “ Яуҙан ҡайтҡан Ҡурай”	Шиғырҙы тасуири уҡыу. Йөкмәткеһен үҙләштереү
Ҡәҙим Аралбай “Йомабай ҡурайы”
Йыһат Солтанов “Ҡәнәфер сәскәһе”	Хикәйәне уҡыу һәм йөкмәткеһен үҙләштереү.
Шайморатов генрал Шиғырҙы тасуири уҡыу. Йөкмәткеһен үҙләштереү
Ә.Бикчәнтәйев “ Бөркөт һауала үлә”
Тимерғәле Килмөхәмәтов “Турайғыр”	Хикәйәне уҡыу һәм йөкмәткеһен үҙләштереү.Гөлфиә Юнысова”Талы бөгөлөп тора”Шиғырҙы тасуири уҡыу. Йөкмәткеһен үҙләштереү
Фәрзәнә Гөбәйҙуллина “Умырзая”Хикәйәне уҡыу һәм йөкмәткеһен үҙләштереү.Абдулхаҡ Игебаев “Сыйырсығым”	Шиғырҙы тасуири уҡыу. Йөкмәткеһен үҙләштереүР.Назаров “Офоҡтағы ҡояш” Шиғырҙы тасуири уҡыу. Йөкмәткеһен үҙләштереү
Сәлмән Якупов “Ҡарабаш турғай”Хикәйәне уҡыу һәм йөкмәткеһен үҙләштереү.Ғабдулла Тукай “Шүрәле”	Халыҡ ижады һәм әҙәбиәт
Виталий Бианки “Которған тейен”	Хикәйәне уҡыу һәм йөкмәткеһен үҙләштереү.
Ибраһим Йосопов “Ҡара бүрек хаҡында һүҙ”	Шиғырҙы тасуири уҡыу. Йөкмәткеһен үҙләштереү
Йомғаҡлау дәресе	Бөтә үтелгәнде йомғаҡлау

**7-се кл.**

Әкиәттәр тураһында түбән кластарҙа үткәнде иҫкә төшөрөү. Тематик яҡтан әкиәттәрҙең төркөмдәре: тормош-көнкүреш, тылсымлы, батырҙар һәм хайуандар тураһындағы әкиәттәр. Хайуандар тураһындағы әкиәттәр. «Етем төлкө», «Айыу менән бал ҡорттары». Тылсымлы әкиәттәр. «Алтын алма», «Әбйәлил». Тормош-көнкүреш әкиәттәре «Алтын тамсы», «һаранбай менән Зиннәт ағай».
Әкиәттәрҙе мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү. Исемдәр биреп план төҙөргә өйрәтеү.
Әҙәбиәт теорияһы. Эпитет, гипербола, аллегория төшөнсәләрен ҡабатлау.
Риүәйәт һәм легендаларға төшөнсә биреү. Уларҙың тематик бүленеше, оҡшаш һәм айырма яктары. Ер-һыу, ырыу-ҡәбилә тарихы: «Етегән йондоҙ», «Ай менән Зөһрә». Ырым-ышаныу: «Сыңрау торна». Тарихи риүәйәттәр: «Бошман ҡыпсаҡ батыр». Тормош-көнкүреш риүәйәте: «Ғилмияза»
Йыр тураһында төшөнсә. Боронғо һәм хәҙерге йырҙар. Оҙон һәм ҡыҫҡа йырҙар. Йырҙарҙа көй һәм моңдоң әһәмиәте. Тематикаһы һәм йөкмәткеһе яғынан йырҙарҙың төркөмдәргә бүленеше. Халыҡтың рухи тормошонда йырҙың роле. Тарихи һәм лирик йырҙар. Тарихи йырҙар («Эскадрон», «Урал»). Тыуған ил һәм халыҡ берҙәмлеге тураһында («Йәйләүек»). Ҡасҡындар тураһында («Буранбай», «Бейеш»). Кантон башлыҡтары тураһында («Тәфтиләү», «Ҡолой кантон»). Ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы тураһында («Зөлхизә», «Ғилмияза»)..
Таҡмактар тураһында төшөнсә. Бейеү таҡмаҡтары. Уйын таҡмаҡтары. Таҡмаҡтарҙың башҡарылыу үҙенсәлектәре, уларҙың йырҙарҙан айырмаһы
М. Тажи «Алтын күҙ», Ф. Рәхимғолова «Күҙ» шиғырҙарында күҙгә тәбиғәттең, күҙ билдәләренең һүрәтләнеше.
Әҙәбиәт теорияһы: Поэтик телдәге һүрәтләү сараларын ҡабатлау. Метафора тураһында төшөнсә.
М.Ғафури. «Ҡыр ҡаҙы» хикәйәһенең идея-тематик йөкмәткеһе. Малайҙың һәм уның атаһының ҡыр ҡаҙына ҡарата мөнәсәбәте. Хикәйәлә ҡоштарға, хайуандарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү һәм ярҙам итеү мотивы. Кеше һәм тәбиғәт темаһына әңгәмә үткәреү.

**8-се кл.**

Р.Бикбаев “Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!”,Ә.Моратов “Башҡортлоҡ” .
Шиғырҙарҙың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Шиғырҙарҙа халыҡ характерына хас ыңғай сифаттарҙы сағылдырыу, халыҡты йәмғиәтте яңыртыуға, демократик нигеҙҙә үҙгәртеп ҡороуға, был көрәштә берҙәмлеккә саҡырыу идеяһы.Ҡобайырҙар.
Ҡобайырҙа халыҡтың фантазияһы, тапҡыр аҡылы һәм тормош тураһында фәлсәфәһе сағылышы. Халыҡты хандарға, бейҙәргә ҡаршы көрәшкә өндәү идеяһы. Тыуған ерҙе һәм уның азатлығы өсөн көрәшкән батырҙарҙы данлау.
Әҙәбиәт теорияһы: Ҡобайыр тураһында төшөнсә.
“Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне”.
Әйтештә феодаль йәмғиәтендәге синыфтар бүленеше һәм синфи көрәштең сағылышы.Идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү.
Әҙәбиәт теорияһы: Әйтештәр тураһында төшөнсә.
Ш.Әминев Тамъяни “Урал”, “Башҡорт бабаларының тарихы”.
Шиғырҙарҙың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Үҙең йәшәгән ер-һыуҙы, Тыуған илен һаҡлаған ир-егеттәрҙе данлау, Урал буйының тәбиғәтен тасуирлау.Мөхәммәт пәйғәмбәр. “Ҡөрьән китабы”.,

Р.Бикбаев “Хәҙистәр”, М.Ямалетдинов “ Ҡөрьән сүрәләре”.
Әҙәбиәт теорияһы: Хәҙистәр тураһында төшөнсә.Ғ.Ибраһимов “Кинйә”.
Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Романда сағылдырылған осор, социаль-тарихи шарттар, халыҡ тормошо һәм көрәшенең сағылышы.
Б.Бикбай “Ер” поэмаһы .,“Ҡаһым түрә”.
Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Халыҡтың үҙ азатлығы өсөн быуаттар буйы алып барған көрәшен һәм азатлыҡ яулауын һүрәтләү. Халыҡ һәм тыуған ер образдарының кәүҙәләнеше. Поэманың художество үҙенсәлектәре.
Драманың идея-йөкмәткеһе. Рус халҡы менән башҡорт халҡы араһындағы дуҫлыҡты сағылдырыу. Халыҡ образы. Реакцион офицерҙар образдары. Әҫәрҙәге төп конфликт.Художестволы әҫәрҙең композицияһы тураһында төшөнсә, әҙәбиәт теорияһы.
Ғ.Сәләм “Шоңҡар”. Поэманың темаһы, идея йөкмәткеһе. Әҫәрҙә кешенең яңынан тыуыуы. Төп образдарға ҡылыҡһырлама биреү.
Поэтик синтаксис – әҙәбиәт теорияһы.
З.Биишева “һөнәрсе менән Өйрәнсек” хикәйәте .Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Төп образдар, художестволы эшләнеше.
Әҙәбиәт теорияһы: Хикәйәт тураһында төшөнсә.
М.Кәрим “Алыҫ юлға эйәрләйҙәр”, “Йәшәйһе бар.,Шиғырҙарҙың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Ҙур хеҙмәт башҡарған, оло хеҙмәткә лайыҡ кешеләрҙе һүрәтләү, кеше ғүмере, йәшәү мәғәнәһе хаҡында уйланыуҙар.
М.Кәрим “Ҡоролтайға ҡотлау”, “Айһылыуҙың күҙ йәштәр.Шиғырҙарҙың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Кешелеклелеккә, шәфҡәтлелеккә саҡырыу.
М.Кәрим “Үлмәҫбай” поэмаһы.Әҫәрҙә башҡорт яугирҙарының Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы батырлыҡтарын кәүҙәләндереү. Поэманың идея йөкмәткеһе. Халыҡ ижады алымдарының оҫта файҙаланыуы. Поэманың оптимистик рухта булыуы, юмористик алымдарҙың әһәмиәте.
Әҙәбиәт теорияһы: Лиро-эпик поэаларҙың үҙенсәлектәре тураһында.
Н. Мусин “Йыртҡыс тиреһе”.Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, Һолтанбайҙың ауыр яҙмышы. Йәмғиәттә хөкөм һөргән шәхес культы осоро эҙемтәләрен, заманыбыҙҙың законһыҙлыҡ, шәфҡәтһеҙлек күренештәрен, фажиғәләрен тасуирлау.
Р.Ғарипов “ Урал йөрәге”, “Аманат”, “Уйҙарым”, “Кеше ғүмере”.Шиғырҙарҙың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Тыуған Башҡортостан, уның тарихын, бөгөнгөһөн һүрәтләү. Кешенең оло йәнлелеген, кешелеклелеген, рухи матурлығын сағылдырыу, гуманлыҡҡа саҡырыу.
Ғ.Х өсәйенов “Һуңғы тарпан” .Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү,тарпандарҙың ҡырып бөтөрөлөүен күрһәтеү. Кейек-хайуандарға, аттарғ рәхимле булырға, уларҙы һаҡларға өндәү.
Әҙәбиәт теорияһы: Әйләнмә композицион сара.
Р.Бикбаев “Башҡортостан бында башлана”, “Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда”, “Дауыл”, “Барып етһен ине хаттарым” .
Шиғырҙарҙа тыуған ергә мөхәббәт, уның именлеге, тәбиғәтте һаҡлау, халыҡ яҙмышы өсөн борсолоу, кешеләр араһындағы дуҫлыҡ, тормошҡа әүҙем мөнәсәбәт проблемалары.Шиғырҙарҙың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү.
Т. Ғиниәтуллин “Мәтрүшкә еҫе”, Әсә һәм бала”.
Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, ябай кешеләрҙең күңел күркәмлеген, эске донъяһының сафлығын күрһәтеү. Хәбибулла образы.
Әсә менән бадла араһындағы мөнәсәбәттәрҙе сағылдырыу. Образдары.

Н.Нәжми “Башҡортостан”, “Аҡ шишмә”.Шиғырҙарҙың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Тыуған Ер – әсәгә һөйөү тойғоһон сағылдырыу. Лирик герой образы.
Ҡ.Аралбай “Беҙ – кеше” поэмаһы.Поэманың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Бөгөнгө көндә беҙҙе уйландырған, борсоған мәсьәләләр: тәбиғәт бысраныу, ер-һыу ағыуланыуы, ил, тел яҙмышы хаҡындағы ҡараштарҙың сағылышы.
Ф.Туғыҙбаева “Аҡмулла”, “Ҡыңғырау”.Шиғырҙарҙың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү.Атом радиацияһының зарарҙары , фажиғәһе арҡаһында тәбиғәттең ағыуланыуы, кешегә зарары, касафатын күрһәтеү.
Ә.Әминев “Ҡытыйгород”.Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү,ер яҙмышы кеше, милләт яҙмышы икәнлеген күрһәтеү.
Р.Камал “ Таня –Таңһылыу”.Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, идея-тематик йөкмәткеһен асыҡлау. Руслашыу һәм милләт-ара ҡатнаш никахтар тураһында уйланыу.
Х. Назар “ Башҡотостан – минең баш йортом”, “Аҡҡа табыныу” , “ Дауа”.Шиғырҙарҙың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Шиғырҙарҙа ил, телде башҡорт йырын данлау, изгелеккә, күңел сафлығына саҡырыу.
Китап хаҡында хикәйәт.Китап – кешелек хәтере. Китап тураһында халыҡ. Башҡорт китабы.

**9-сы кл.**

Мәҙәниәт һәм әҙәбиәт. Сәнғәт менән әҙәбиәт бәйләнеше.
удожестволы әҙәбиәт һәм фән. Художестволы әҙәбиәт — һүҙ сәнғәте. Әҙәбиәттең эстетик тәрбиә биреүҙәге әһәмиәте. Әҙәбиәттең тормош менән бәйләнеше. Башҡорт әҙәбиәтендә — халыҡ тормошоноң элекке замандарҙан алып хәҙерге көнгә тиклем сағылышы. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы.
Башҡорт халыҡ ижады (13 сәғәт).
Халыҡ ижады тураһында түбән синыфтарҙа алған белемдәрҙе иҫкә төшөрөү. Әкиәт, мәҡәл, йомаҡ, йыр, таҡмаҡ, легенда, риүәйәт, ҡобайыр жанрҙарын ҡабатлау. Халыҡ ижады һәм яҙма әҙәбиәттең бәйләнеше. Улар араһындағы уртаҡлыҡ һәм айырма. Ауыҙ-тел ижадының яҙма әҙәбиәт үҫешендәге роле.
Башҡорт халыҡ ижадының традицион жанрҙары. Башҡорт ҡарһүҙҙәре (мифтар). Йола поэзияһы. Йырҙар, бәйеттәр, риүәйәттәр, көләмәстәр. Халыҡ хәтер һәм халыҡ институты төшөнсәһе. Хәҙерге башҡорт фольклоры һәм уның тенденциялары.
Башҡорт халыҡ эпосы йәки ҡобайырҙар. Ҡобайыр жанрына төшөнсә. Ҡобайырҙың формалары һәм төркөмдәре. Тыуған ил тураһында ҡобайырҙар. Батырҙар тураһында ҡобайырҙар. Тормош-көнкүреш ҡобайырҙары. Ҡобайырҙарҙың жанр, тел-стиль үҙенсәлектәре, образдар системаһы. Уларҙа тормош фәлсәфәһенең һәм фантастиканың сағылышы. Ҡобайыр шиғыры.
«Урал батыр» эпосы. Һүҙлек өҫтөндә эш. Эпоста күтәрелгән философик, педагогик һәм әхлаҡ-этик проблемалар. Ғаилә һәм тәрбиә мәсьәләләре. Кешенең бөйөклөгө, тәбиғәт менән халыҡтың үлемһеҙлеге темаһының хәл ителеше. Самрау батша иле һәм халыҡтың ижтимағи идеалы. Әҫәрҙә фантастика һәм реаллек. Урал һәм Шүлгән образдары. Ҡобайырҙың художестволы үҙенсәлектәре.
«Урал батыр» эпосы хаҡында яңы мәғлүмәттәр, уның ижад ителеү осоро хаҡында бәхәстәр, фекерҙәр.
«Иҙеүкәй менән Мораҙым» эпосы.

Һүҙлек өҫтөндә эш. Эпостың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Һүрәтләнгән нуғай тарихи осорона характеристика биреү. Әҫәрҙә күтәрелгән проблемалар: азатлыҡ өсөн көрәш, ата менән ул мөнәсәбәттәре. Тыуған ил, хан, әмирҙәрҙең тәхет өсөн тартышы.
Аҡһаҡал Һабрау образы. Туҡтамыш ханға характеристика. Аҡһаҡ Тимер яуы. Эпостың композицияһы, поэтикаһы, стилеЭйәрсән һөйләмде баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, бәйләнеү юлдарыБоронғонан алып XVIIIбыуат аҙағына тиклемге башҡорт әҙәбиәте (8 сәғәт).
Руник төрки ташъяҙмалар. Мәхмүт Ҡашғари һүҙлеге. Ундағы йыр, дастан, мәҡәл үрнәктәре. «Ҡотадгу белек» дастаны. Уғыҙнамә, Ҡорҡот-Ата хикәйәттәренең ҡыҫҡаса йөкмәткеләре менән танышыу. Башҡорт версиялары.
Боронғо әҙәби ҡомартҡылар.
Боронғо ҡулъяҙма китаптар. Китап күсереүселәр. Боронғо әҙәбиәттең дини һәм ярым донъяуи-дидактик характерҙа булыуы.
Ҡол Ғәли. «Ҡиссаи Йософ». Ҡиссаның идея-тематик йшсмәткеһе. Әҫәрҙә ата менән балалар мөнәсәбәте, байлыҡ, шөһрәт, көнсөллөк күренештәрен асыу. Поэмала хакимдар һәм халыҡ мөнәсәбәте.
Ҡиссалағы «Яҙмыштан уҙмыш юҡ» идеяһы. Поэманың мосолманлыҡ рухы, Ислам диненең өгөт-нәсихәттәр менән һуғарылған булыуы. Йософ һәм Зөләйха образдары.
«Буҙъегет» поэмаһының идея-тематик йөкмәткеһе. Унда күтәрелгән төп проблемалар. Художество үҙенсәлеге. Баҫмалары. Варианттары..
Урта быуат әҙәби ҡомартҡылары.
Урта быуат төрки әҙәбиәтенә ҡыҫҡаса характеристика.
Һүҙлек өҫтөндә эш. Ҡотоб «Хөсрәү вә Ширин», Сәйф Сараи, Хәрәзми «Мөхәббәтнамә», Хөсәм Кәтиб «Жөмжөмә солтан» дастандарының идея-тематик йөкмәткеһен, тел-стиль, поэтик үҙенсәлектәрен үҙләштереү.
. Әҙәби әҫәрҙәрҙән миҫалдар табыу.
XVIIIбыуатта милли-колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәш. Тарихи белешмә биреү. Башҡорт яуҙары. «Батыршаның батшаға яҙған хаты». Хатта халыҡ тормошонон, азатлыҡ идеяла-рының асылышы. Батырша яҙмышы.
«Ҡуҙыйкүрпәс» ҡулъяҙма әҫәрендә халыҡ ижады сюжеты.
«Бәхтийәрнамә», «Буҙйегет» әҫәрҙәрендә артабанғы дастанлыҡ традицияларының дауам ителеүенең сағылыуы. Сәйәхәтнамә жанры.
Эйәрсән тултырыусы һөйләм, уның баш һөйләмдең тултырыусыһы урынында килеүе, йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтле һүҙ менән бирелгән тултырыусыға ҡарауы, баш һөйләмгә бәйләнеү саралары, тыныш билдәләренең ҡуйылышын әҙәби әҫәрҙәрҙән алынған миҫалдар нигеҙендә аңлатыу. Башҡорт телендәге эйәрсән тултырыусы һөйләмдәрҙең рус теленә тәржемә ителеү мөмкинселектәре.
Йырауҙар һәм сәсәндәр ижады.
Һабрау, Асан Ҡайғы, Ҡаҙтуған йырауҙар.
Йырау тураһында төшөнсә, һабрау, Асан Ҡайғы, Ҡаҙтуған йырауҙарҙың тормошо һәм ижады, уларҙың һүҙ оҫтаһы һәм музыкаль һәләттәре хаҡында мәғлүмәттәр, риүәйәттәр.
Сәсәндәрҙең йыраусылыҡ традицияларын дауам итеүе.
Ҡобағош сәсәндең тормошо һәм ижады.
«Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағыш сәсәндең әйтешкәне».
Ҡарас сәсән. Тормошо тураһында риүәйәт. «Аҡша батыр менән әйтешкәне».

Ерәнсә сәсән. Тормошо һәм ижады. «Ерәнсә сәсәндең Әбел-хайыр ханға әйткәне» әҫәрҙең идея-тематик, эстетик йөкмәткеһе.
Байыҡ сәсән. Тормош юлы һәм ижади эшмәкәрлеге. Байыҡ сәсәндең ҡаҙаҡ аҡыны Бохар менән әйтешкәне. Салауатҡа һамаҡлап әйткәне. Уның тураһындағы көләмәстәр.
Буранбай-Йәркәй сәсән. Биографияһы. Уның ҡурайсылыҡ һөнәреһәм үҙе ижад иткән йырҙары.
Ишмөхәмәт сәсән. Биографяһы. Ижады.
Ғәбит сәсән. Эпик жанрҙан торған бай репертуары.
Сәсәндәр ижадында фольклор һәм әҙәбиәт традиҹияларының сағылышы һәм берләшеүе.
Синыфтан тыш уҡыу өсөн: Башҡорт әҙәбиәте антологияһының 1-се китабынан «Йырауҙар» бүлеген уҡырға.
Салауат Юлаев (5 сәғәт).
Яугир-шағирҙың тормошо һәм яҙмышы. Салауат — башкорт халҡының легендар батыры һәм сәсән шағиры. Уның шиғырҙарының һаҡланыу тарихы. Әҫәрҙәрҙең тематикаһы һәм идея йүнәлеше. Тыуған илде, туған тәбиғәтте һөйөү («Һандуғас», «Тирмәмдә», «Мөхәббәт һәм ғаилә», «Зөләйха») тураһындағы лирик шиғырҙары.
Салауат поэзияһында азатлыҡ өсөн көрәш, батырлыҡ мотивтары («Уҡ», «Яу», «Егеткә»).
Салауат телмәре» йәки «Бүгәсәүгә ҡушылып, ир батырға ҡуш булып» тигән ҡобайыр. Уның идея йөкмәткеһе. Салауаттың телмәре.
Салауат шиғырҙарының һәм ҡобайырҙарының поэтик үҙенсәлектәре.
Әҙәбиәт теорияһы. Тарихи шәхес һәм әҙәби герой, тарихи ваҡиға һәм художестволы әҫәр тураһында төшөнсә.Д. Лежневтың «Салауатты ҡулға алыу», А. Кузнеҷовтың «Салауаттан һорау алыу» картиналары буйынса әңгәмә. Телдән һәм яҙма эштәр башҡарыу.
Синыфтан тыш уҡыу өсөн: «Салауат» (Өфө, 1983) китабынан Р. Игнатьев, Ф. Нефедов, С. Злобин әҫәрҙәре..
XVIIIбыуат әҙәбиәте
Т. Ялсығол-әл-Башҡорди (2 сәғәт).
Биографияһы. Әҙәби һәм мәҙәни эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәттәр. «Рисаләи Ғәзизә» дидактик китабы.
«Тарихнамә-и-Болғар»ҙың идея-тематик йөкмәткеһе. Әҫәрҙең тәүарих жанрында яҙылыуы. Әй ырыуы шәжәрәһе.
Эйәрсән күләм-дәрәжә һөйләм, уның баш һөйләмдә күләм- дәрәжә хәле урынында килеүе, йә баш һөйләмдәге мөнәсәбәтл һүҙ менән бирелгән күләм-дәрәжә хәлен асыҡлауы. Эйәрсән күләм-дәрәжә һөйләмен баш һөйләмгә бәйләүсе саралар, баш һөйләм менән эйәрсән һөйләмдәр араһындағы тыныш билдә ләре. Уҡылған әҙәби әҫәрҙәрҙән миҫалдар табыу.
Ғәбдрәхим Усман (2 сәғәт).
Тормошо һәм ижады. «Ғәуариф эз-заман» («Заман укымышлылары»), «Китабы Мөһиммәт эз-заман» («Заманыны мөһим хәлдәре китабы») дидактик йыйынтыҡтарының тематикаһы, жанрҙары. Тәржемә әҫәрҙәре.
XIXбыуат әҙәбиәте (2 сәғәт).
XIXбыуаттың беренсе яртыһында ижтимағи тормош һәм мәҙәниәттең үҫеше. Мәҙрәсәләр. Суфый шағирҙар ижады.XIXбыуаттың икенсе яртыһында Башҡортостанда әҙәбиәт һәм мәҙәниәт. Мәғариф. Ғалимдар (М. Биксурин, С. Күкләшев, М. Иванов). Башҡорт фольклорын йыйыу (Р. Игнатьев,С. Рыбаков, Ф. Нефедов, М. Лоссиевский).

Рус яҙыусыларының әҫәрҙәрендә башҡорт халҡының тормошо, тарихы, азатлыҡ өсөн көрәшенең сағылышы. (А. Пушкин «Пугачев ихтилалы тарихы», «Капитан ҡыҙы»,Л. Толстой «Ильяс», «Кешегә күпме ер кәрәк»; Н. Крашенников «Үлем сейәләре», «Әсә»).
XIXбыуаттың икенсе яртыһында башҡорт әҙәбәтенең ныҒына барыуы. Реалистик поэзия, проза, драматургия..
Ғ. Соҡорой (2 сәғәт).
Биографияһы. «Тәуарих-и-Болғария» әҫәре һәм шиғырҙарының, идея-тематик йөкмәткеһе.
М. Аҡмулла (5 сәғәт).
Шағирҙың тормошо һәм ижады. Ҡаҙаҡ далаларында, ҡаҙаҡ балаларын уҡытыуы. Туҡһанбай ауылындағы музейы.
